*Клара МОРТАЗИНА,*
*Ишембай ҡалаһы һәм районы халыҡ мәғариф идаралығының информацион-методик үҙәге методисы*

# КИЛӘСӘККӘ БАҒЫП

## Остаздар һалған һуҡмаҡ

Ишембай ҡалаһында башҡорт балаларын үҙ туған телдәрендә уҡытыу эшенә нигеҙ һалыу осоро 1938 йылдарға тура килә.

Йәш быуынды туған телгә өйрәтеү, уға һөйөү тәрбиәләү эшенә, тел һәм әҙәбиәт уҡытыуға бөтә көсөн һалған уҡытыусылар хаҡында һөйләргә теләйем. Тәүгеләрҙән булып Лотфулла Абдулла улы Ҡарамышев, Миникарам Абдулла улы Вилданов, Миниямал Сәхәүетдин ҡыҙы Абдуллина, Флүрә Фәйзрахман ҡыҙы Ибраһимова, Шәүрә Минһаж ҡыҙы Хәсәнова, Сөйөмбикә Сәхәүетдин ҡыҙы Фәйзуллиналар тотона.

Маҡар ауылының данлыҡлы Ҡарамышевтар ғаиләһенән сыҡҡан Лотфулла Абдулла улы ҡаланың 3-сө башҡорт мәкәтәбендә, ә һуңынан 2-се интернат-мәктәбендә 1963 йылға тиклем эшләп, хаҡлы ялға китә. «РСФСР-ҙың мәғариф отличнигы» тигән юғары исемгә лайыҡ булған уҡытыусының күкрәген Ленин ордены биҙәй.

Миникарам Абдулла улы Вилданов сығышы менән Иҫке Ишембай ауылынан. Үҙ өҫтөндә ныҡышмалы эшләгән уҡытыусы Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтын, һуңғараҡ Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.

Көсәпҡол ауылында тыуып үҫкән Миниямал Сәхәүетдин ҡыҙы Абдуллина ла хаҡлы ялға сыҡҡансы 2-се интернат-мәктәптә уҡыта. Талантлы мөғәллимә ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем туған мәктәбен ташламай, кәңәштәре менән ярҙам итә.

РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Флүрә Фәйзрахман ҡыҙы Ибраһимова 1-се интернат-мәктәп асылған тәүге көндәрҙән башлап 40 йыл ғүмерен туған телде уҡытыуға, балалар тәрбиәләүгә арнай.

## Эстафета ышаныслы ҡулдарҙа

Бөгөн тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары, остаздарының эшен дауам итеп, үҙҙәрен киләсәк алдында икеләтә яуаплы тоя. Беренсенән, улар туған тел уҡыта, икенсенән, рух үҫтерә, бар булмышы, таланты менән әсә теле аша шәхес тәрбиәләй.

«... Бер ҡанатым әсәм теле булһа,
Икенсеһе — атам әҙәмиәт.
Телле итһә мине туған телем,
Кеше итте рухым әҙәбиәт»,

— ти 2-се башҡорт республика гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, йәш шағирә Ғәлиә Миҙхәт ҡыҙы Кәлимуллина.

Был һүҙҙәрҙе әҙәбиәт, интеллигентлыҡ рухы йәшәгән гимназияның девизы тип атаһаҡ та хата булмаҫ, сөнки мәктәп сал быуаттар төпкөлөнән килгән мираҫыбыҙға йән өрә алырҙай шәхестәр тәрбиәләүе менән ҡиммәт. Милли кадрҙар әҙерләүҙә үҙенең тос өлөшөн индергән коллективта ысын мәғәнәһендә үҙ эшенең оҫталары эшләй. Ә инде башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары үҙҙәре бер табыш.

Аҙнабаева Гөлнур Шамил ҡыҙының дәрестәре генә лә ни тора! Һәр береһе үрнәк булырҙай. Башҡорт теленән тәүгеләрҙән булып терәк конспекты сараларын да нәҡ ул ҡулланды, стандарт булмаған дәрестәр үткәреү оҫтаһы ла үҙе. Һуңғы йылдарҙа ул юғары синыфтарҙа әҙәбиәт дәрестәрен П.С. Эрдниевтың эреләтелгән блок системаһы буйынса ойош-

тора. 1989 йылдан бирле ҡала мәктәптәренең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик ойошмаһын етәкләй һәм шул уҡ ваҡытта аспирантурала уҡырға ла ваҡыт таба.



*Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары*

Башҡортостан Республикаһының халыҡ мәғарифы отличнигы һәм атҡаҙанған уҡытыусыһы Филүзә Шәриф ҡыҙы Ишбирҙина ла үҙенең дәрестәрендә уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итерҙәй методик алымдарҙы, өҫтәмә материалдарҙы оҫта файҙалана. Уның заман талаптарына яуап бирерлек итеп йыһазландырылған кабинеты ҡалала беренсе урынға лайыҡ булды.

## Мөғәллимлек ҡомары бар уларҙа

1-се Республика кадет интернат-мәктәбе лә үҙенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана.

Мөхәммәтова Рәйсә Миңлеғәли ҡыҙының әҙәбиәт дәрестәре — ул тәрбиә һәм тормош дәрестәре. Уҡыусыларында эстетик зауыҡ, әҙәп, әхлаҡ, милли рух тәрбиәләү менән бергә донъяға фәнни ҡараш формалаштырыу, телмәр культураһын үҫтереү маҡсаттарын тормошҡа ашыра уҡытыусы. Бай педагогик эш тәжрибәһе ҡала һәм республика кимәлендә өйрәнелә. Ул «Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы» тигән маҡтаулы исем йөрөтә.

Сөйәрғолова Әнисә Булат ҡыҙы иһә дәрестәрен «Тормош һабаҡтары» менән әҙәбиәтте бергә ҡушып, халыҡ педагогикаһына таянып үткәрә. Ул башлыса рус телле балаларҙы әсә теленә өйрәтеү менән мәшғүл. Шуға ла, башҡорт телен уҡытыу буйынса тиҙләтелгән уҡыу программаһын төҙөп, уҡыусыларҙы бер кимәлгә еткереүҙә күрә үҙ эшенең асылын. Төп эшенән тыш ҡала күләмендәге сараларҙа ҡатнашырға ла өлгөрә ул.

Ғөмүмән, ҡала мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен юғары белемле һәм квалификациялы уҡытыусылар уҡыта. Улар өлгәшелгәндәрҙә генә туҡталып ҡалмай, туҡтауһыҙ эҙләнеү, ижад итеү, камиллашыу өҫтөндә эшләй.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә 1-11-се синыфтар өсөн башҡорт телен өйрәнеү программаһы нәшер ителгән икән, уны төҙөүҙә 12-се лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы Л.F. Вәлишинаның да өлөшө ҙур. Был программа Халыҡ мәғарифы министрлығы һәм Мәғарифты үҫтереү институты тарафынан раҫланды.

1999 йылда Мәҫкүрә Солтанованың «Халыҡ педагогикаһы ҡанундарына таянып эш итеү буйынса ҡулланма»һы донъя күрҙе.

15-се мәктәптә Рабиға Шаһибәк ҡыҙы Мәхмүтова, Фаягөл Тимербай ҡыҙы Әмирханова, Рүзилә Бәхтиәр ҡыҙы Яубаҫарова ла ошо юҫыҡта эшләй. Уҡыусылары 1-се синыфтан алып 10-сыға тиклем халыҡ традициялары рухында тәрбиәләнә, был изге эшкә хатта ата-әсәләр ҙә йәлеп ителә. Берреһенән-береһе сағыу, бай йөкмәткеле саралар үткәрелеүе ана шул бергәләп эшләү һөҙөмтәһе лә инде.

2, 6, 11, 18-се мәктәптәрҙә, 1-се гимназияла башҡорт теле уҡытыусылары АСО системаһын киң ҡуллана һәм ярайһы ғына уңыштарға өлгәшә. Ә бына 12-се лицейҙа Вәкилә Фәрит ҡыҙы Һәүбәнова менән Лена Ғәлимхан ҡыҙы Вәлишина коммуникатив алымға өҫтөнлөк бирә. Был ысул дәрестәрҙә балаларҙы тормошта осраған ваҡиғаларға алып инә, унда юғалып ҡалмаҫҡа өйрәтә, һәр нәмәгә үҙ фекерен, ҡарашын булдырырға ярҙам итә.

Ҡалала иң йәш уҡыу йорттарының береһе — 19-сы мәктәп. Башҡорт телен пропагандалау һәм уҡыусыларҙа туған телгә һөйөү уятыу өсөн күп көс һалына. Ғ.Ә.Мәҡсүтова үҙенең төп эшенән тыш «Башҡорт фольклоры» түңәрәгенә лә етәкселек итә. Ә түңәрәктә балаларҙың һәләте тағы ла нығыраҡ асыла, күңеле байый. Тимәк, уҡытыусы дөрөҫ юлда.

Смаҡайҙағы 14-се мәктәптең асылыуына 3 йыл ғына ваҡыт үтһә лә, йәш коллективтың башҡорт мөхитенә индерелгән уңыштары бихисап. Эстетик зауыҡ менән биҙәлгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты ҡала мәктәптәре араһында уҙғарылған конкурста икенсе урынды алды. Мәктәптә уҙғарылған саралар ҙа балаларҙа башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләүгә, уның нескәлектәрен өйрәнеүгә ҡайтып ҡала. Уҡыусыларҙы туған телдән йәш, өмөтлө уҡытыусы Венера Биктимер ҡыҙы Әйүпова уҡыта.

1-се гимназияла башҡорт теле 6-сы синыфҡа тиклем уҡытыла. 5-6-сы синыфтарҙа урыҫ балалары өсөн башҡорт телмәрен үҫтереү төркөмдәре бар. Мәрйәм Хәйрулла ҡыҙы Исхаҡова, Фәриҙә Рәшит ҡыҙы Ҡорбанова һәм Зилә Сәйет ҡыҙы Сибәғәтуллина — өсөһө лә юғары белемле, бай тәжрибә туплаған уҡытыусылар. Бөгөн М.Х. Исхаҡова Стәрлетамаҡ педагогия институтының доценты, педагогия фәндәре кандидаты Р.Ә. Әбүталипова етәкселегендә «Беренсе кластарҙа башҡорт телмәрен үҫтереү технологияһы» тигән дәреслек өҫтөндә эшләй. Ҡалала башҡорт теле һәм әҙәбиәте мөғәллимдәре араһында ир уҡытыусылар ни бары икәү генә. Уларҙың береһе — Шәрипов Мөхәммәт Зариф улы 4-се мәктәптә эшләй. Йыр-моңға әүәҫ, ҡурайҙа оҫта уйнаған уҡытыусының дәрестәре үҙенсәлекле булыуы менән айырыла.

11-се урта мәктәптең бик отҡор, үҙ эшен яратҡан, эштә осҡон кеүек янып йөрөгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәймә Малик ҡыҙы Тимерғәлина балалар менән берлектә төрлө саралар ойоштора, үҙенең тыуған ауылы Этҡолға «Ҡаҙ өмәһе»нә алып бара, башҡорт йырҙарын оҫта башҡарыусы яҡташтарыбыҙ менән осрашыу үткәрергә лә өлгөрә. Уҡыусылар күңелендә улар матур иҫтәлектәр ҡалдырҙы.

Ҡалабыҙҙың 2-се урта мәктәбендә уҡыусылар матур итеп үҙ туған телендә аралаша, йырлай, шиғыр һөйләй белә икән — былар йәш уҡытыусы Кәримова Фәймә Әғзам ҡыҙының уңыштары. Рус мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусылары араһында АСО системаһын тәүгеләрҙән булып ҡулланып, уҡытыу кимәлен күтәреүҙә ярайһы уңыштарға өлгәште.

3-сө урта мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте 1-се синыфтан 9-ға тиклем уҡытыла. Тырыш уҡыусыларҙың күңелен яулаған, дәрестәрен оҫта һәм ҡыҙыҡлы итеп үткәргән уҡытыусы Иҙрисова Гүзәл Урал ҡыҙын коллегалары һәр саҡ маҡтап телгә ала. Уның да матур уңыштары бар.

Ә бына Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы Минзәлә Әмир ҡыҙы Усманова, 5-се мәктәп уҡыусыларына әсә телен өйрәтеүҙән тыш, юғарыла атап кителгән рус мәктәптәрендәге башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмәһенә етәкселек итә. Бихисап уңыштары, бай педагогик тәжрибәһе булған мөғәллимә йәш коллегаларына һәр ваҡыт терәк булып тора.

18-се мәктәп тә үҙенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһынан уңды, сөнки бындағы уҡыусылар Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы, йырбейеүгә, нәфис һүҙгә маһир Рәшиҙә Фитрат ҡыҙы Мөхәмәтйәрованан белем ала.

## Илһам шишмәләре ауылдарҙан юл ала

Тыуған илде, тыуған төйәкте, тәбиғәтте, ата-әсәнде яратыу, кешелеклелек, шәфҡәтлелек сифаттары тәрбиәләүҙә, күңелдәргә иман нуры ҡабыҙыуҙа ауыл уҡытыусыларының роле баһалап бөткөһөҙ. Шуға ла районыбыҙҙан бына тигән яҙыусылар, шағирҙар, йырсылар, актерҙар сыҡҡан.

Ғүмере буйы Этҡол урта мәктәбендә арымай-талмай хеҙмәт иткән олуғ уҡытыусыларҙың береһе Ғәбдрәхим Мөхәммәҙи улы Арыҫлановты иҫкә алып китке килә. Уның вафатына байтаҡ йылдар үтһә лә, элекке уҡыусылары дәрестәрен әле булһа һағынып иҫкә ала икән, уҡытыусы өсөн ошонан да оло баһа юҡтыр. Кинйәбулат ауылында оҙаҡ йылдар балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренең иң матур өлгөләрен биргән Нафиҡ Фәйзрахман улы Мифтахов, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмәһенә етәкселек иткән оҫта ойоштороусы, ялҡынлы педагог Миҙхәт Зәйләғәли улы Яппаров кеүек үҙ эшенең ысын оҫталары булыуы менән ғорурлана район уҡытыусылары.

Бөгөн дә үҙ һөнәрҙәрен яратҡан, уҡыусыларына бөтә йөрәк йылыһын һалған уҡытыусыларын район яҡшы белә.